# БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН БЕРҘӘМ ДӘҮЛӘТ ИМТИХАНЫ

**Инструкция**

Һорауҙарға яуап бирер алдынан инструкцияны иғтибар менән уҡып сығығыҙ.

Башҡорт теленән имтихан 40 һорауҙан тора. 1-се өлөштә (А) 31 һорау бирелә. Һәр бер һорауға 4 төрлө яуап килтерелә. Шуларҙың береһе генә дөрөҫ.

2-се өлөштә (В) 8 һорау бирелә. Уларға ҡыҫҡаса яуапты һандар һәм хәрефтәр тәртибендә бирергә кәрәк.

3-сө өлөштә бер эш бирелә – йөкмәткеһе буйынса ҙур булмаған инша яҙырға ҡушыла. Инша махсус бланкта яҙыла.

Яуаптарҙы асыҡ, матур яҙығыҙ. Имтихан һорауҙарына яуап биреү өсөн 3 сәғәт (180 мин.) ваҡыт бирелә. Эштәрҙе бирелеү тәртибендә үтәргә кәрәк. Ваҡытты сарыф итмәү өсөн яуап бирә алмаҫтай һорауҙы ҡалдырып тороғоҙ һәм икенсе һорауға күсегеҙ. Бөтә һорауҙарға ла яуап биргәс, был һорауҙарға кире урап килергә мөмкин. Ваҡытты дөрөҫ бүлергә кәрәк: А – 31-45 минут, В – 8-45 минут, С – 90 минут.

Дөрөҫ яуап ҡатмарлылығына ҡарап бер йәки бер-нисә балл менән баһалана. Бөтә эштәр өсөн ҡуйылған балдар ҡушыла. Күберәк һорауҙарға яуап биреп, күберәк балл йыйырға тырышығыҙ.

**Һеҙгә уңыштар теләйбеҙ!**

---

## 1-СЕ ВАРИАНТ

### 1-СЕ ӨЛӨШ

***А1-А31 эштәрҙе башҡарғанда 1-се һанлы яуаптар бланкыһында шаҡмаҡҡа һеҙ һайлап алған яуапҡа тап килгән һан эргәһенә «х»***

***тамғаһын ҡуйығыҙ.***

**A1.** Һуҙынҡы өндән башланмаған һүҙҙе билдәләгеҙ.
1) үлән
2) уҡыусы
3) елән
4) ағас

**A2.** Текст барлыҡҡа килерлек итеп һөйләмдәрҙе бер тәртиптә урынлаштырығыҙ.
А) Арҡыс-торҡос ҡағып, ике-өс һайғауҙан ғына эшләнгән арата ҡапҡа бөтөнләй ҡар аҫтында ҡалып, уның аша тар ғына берләм юл һалынған.
Б) Йәйәүле лә бик һирәк йөрөгән. Кем йөрөһөн һуң унда?
В) Күрәһең, уларға ҡыш буйынса бер генә тапҡыр ҙа атлы сана инмәгән.
Г) Емештең күҙе иң элек Шәүрәләрҙең өйөнә төштө. Был кескәй өйҙө бөтөнләй тип әйтерлек ҡар күмеп киткән.
1) Б, Г, В, А
2) Г, А, Б, В
3) Г,А, В, Б
4) В, Г, Б, А

**A3.** Түбәндәге исемдәр ниндәй юл менән яһалған?
Йорт-ҡура, бала-саға
1) ялғау ҡушылыу юлы
2) һүҙҙәрҙе парлау юлы
3) һүҙҙәрҙе бәйләү юлы
4) һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу юлы

**A4.** Һөйләмдә хәбәрҙең ниндәй һүҙ төркөмөнән килеүен күрһәтегеҙ.
Ул – уҡыусы, мин – уҡытыусы.
1) исем
2) алмаш
3) ҡылым
4) сифат

**A5.** Тик диалект һүҙҙәр булған төркөмдө билдәләгеҙ:

1) яҙлар, баллар, таллар
2) шат, көләс, күңелле
3) мәҙрәсә, мәктәп, уҡыусы
4) уйын, уйынсыҡ, уйнаусы

**A6.** Тыныш билдәләре дөрөҫ ҡуйылған һөйләмде күрһәт.
1) «Әсәй, мин бөгөн дуҫым менән еләккә барайыммы?» - тип һораны Рәмилә.
2) Уҡытыусы балаларға «Иртәгә ата-әсәләр йыйлышы була», - тине.
3) «Һаумыһығыҙ! Дәрескә инергә мөмкинме» тип һораны Айнур.
4) Әсәйем миңә: «Баҡсаға эшкә сығырбыҙ» - тине.

**A7.** Фразеологизмдар булған юлды күрһәтегеҙ:
1) Мәғфүрә Диләгә һыу килтерергә ҡушып, үҙе өстағанға ут яҡты.
2) Ул бөгөн башҡа көндәрҙәге кеүек асыулы түгел, эре һары тештәрен күрһәтеп йылмая.
3) Алыҫтараҡ бер ҡыуышта илаған бала тауышына кемдер уянып, уны бәүетеп йоҡлатырға кереште.
4) Ҡотлоярҙың былай ҡайтыуына Мәғфүрәнең эсе ҡырһала, тыштан белдермәҫкә тырышты.

**A8.** Үҙгәртеүсе ялғауҙар менән бирелгән һүҙҙәр юлын табығыҙ:
1) яулығын, ашаған, сәйем, ҡарттың
2) нигеҙҙең, өсөһөнөң, йөрөүсе, тәндәре
3) урмансылар, зәңгәрһыу, йомғағы, алыҫта
4) өмөтлө, хужаға, көтөүҙәре, тырышлыҡ

**A9.** Ҡалын һуҙынҡылы ялғауҙар ғына ҡабул иткән юлды күрһәтегеҙ:
1) йәш, ем, күбәләк, мөгөҙ
2) трактор, сәйнүк, көршәк, диван
3) хәбәр, цирк, кишер, мейес
4) офоҡ, донъя, бабай, һалдат

**A10.** Башҡарылыу бәйләнеше булған юлды билдәләгеҙ:
1) шундай тәртип
2) эш һөҙөмтәһе
3) иң яҡын ярҙамсы

4) тауышҡа уянды

A11. Бойороҡ һөйкәлеше булғанюлды табығыҙ:
1) Бына ҡайҙа ул ауыртмаған башҡа тимер таяҡ
2) Ошо ағас еçе бигерәк тәмле
3) Бик саҡырғың килмәгәс, вәғәҙә итмәйҙәр ул
4) Тарт, Аллаяр, тарт гармуныңды

A12. Төп башҡорт һүҙҙәре генә бирелгән рәтте билдәләгеҙ:
1) быуат, дан, ейән, телмәр
2) сәйәхәт, сәскә, ағас,йәш
3) ысыҡ, конверт, бабай, аяҡ
4) өçтәл, бай, ҡарт, болот

A13. Бирелгән һөйләмдәрҙең ҡайһыһында өтөр ҡуйыла?
1) Ғөмүмән башҡорттар бик яҡшы һуғышсы булыуын иçбат итте.
2) Хәҙер бына ауылдаштарының осраған береһе менән күкрәк ҡағып һөйләшә.
3) Халыҡтың тамырын белеү ҙә шул үҙеңдең ғаилә тамырыңды юллап табыуҙан башлана.
4) Тышта бурап-бурап епшек ҡар яуа.

A14. Айырым яҙылған ҡушма һүҙҙе күрһәт
1) ишә ишә
2) «Фрунзе» колхозы
3) тулыр тулмаç
4) дуç иш

A15. Киçәксә булған һөйләмде күрһәтегеҙ.
1) Һеҙгә ваҡытында эшләргә кәрәктер бит.
2) Яратам тыуған илемде Шатлыҡ килтергән өсөн.
3) Яңы тимер юл беҙҙең район аша үтәсәк.
4) Айбулат шатлыҡлы уйҙар менән ауылына ҡайтып китте.

A16. Яһаусы ялғаулы һүҙҙе билдәлә.
1) уйҙар
2) һүҙлек
3) игенгә

4) апаймын

**A17.** Тарҡау һөйләм бирелгән юлды күрһәтегеҙ.
1) Хәйләһеҙ батыр тиҙ үлер.
2) Муса Мортазин – хәрби Кеше.
3) Ҡунаҡтар китте.
4) Ямғыр яуған инде.

**A18.** Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙең ҡайһыһында һыҙыҡ ҡуйыла?
1) Быйыл баҡса еләге ҡотороп унды үҙе күп үҙе эре.
2) Белгән белеменә ышаныр, белмәгән беләгенә ышаныр.
3) Бесәнгә төшөрҙәр ине етәкселәр ҡушмай.
4) Уҡыған уңыр уҡымаған туңыр.

**A19.** Рус теленән үҙләштерелгән ҡайһы һүҙҙәргә ялғауҙар дөрөҫ ҡушылған?
1) грамға, лагерға
2) грамға, лагергә
3) граммға, лагерға
4) граммға, лагерьға

**A20.** Түбәндә бирелгән һүҙҙәрҙең ҡайһыһы омоним булып килә ала?
1) иҙән
2) япраҡ
3) һалам
4) аҡлан

**A21.** Бирелгән һөйләмдә ниндәй тыныш билдәһе төшөп ҡалған?
Мәҡәл һүҙ аҫҡысы.
1) өтөр
2) һыҙыҡ
3) нөктәле өтөр
4) ике нөктә

**A22.** Ҡайһыюлда сифаттың аҙһытыу дәрәжәләре генә бирелгән?
1) зәп-зәңгәр ҡапҡа, оҙон кәүҙә
2) матур бала, һөйөнөслө хат

3) аҡһыл буяу, көрәнһыу төҫ
4) ҡарағусҡыл йөҙ, ҡыҙылыраҡ алма

**A23.** Хатаһыҙ яҙылған һүҙҙәр рәтен билдәләгеҙ:
1) йүгән, йүнсел
2) югән, йүнсел
3) йүгән, юнсел
4) югән, юнсел

**A24.** Эйәртеүле ҡушма һөйләмдә эйәрсән һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ:
Гөлйөҙөм күҙҙәрен йомоп ятып тороуға ҡарамаҫтан, Айбулаттың ҡуйы ҡара сәстәре, тәрән уйсан күҙҙәре, ҡупшы төҙ кәүҙәһе күҙ алдынан китмәне.
1) шарт һөйләм
2) кире һөйләм
3) сәбәп һөйләм
4) сағыштырыу һөйләм

**A25.** Тыныш билдәһе дөрөҫ ҡуйылған тура телмәрле һөйләмде табығыҙ.
1) – Ғәфү ит мине, Йәғәфәр! Рухыма азатлыҡ бир! Гонаһымдан ҡотҡар мине! Ваҡыты еткәс, тыныс ҡына донъя ҡуйырға рөхсәтит миңә! Кисер мине! (М. Кәрим).
2) – Ғәфү ит мине, Йәғәфәр. Рухыма азатлыҡ бир. Гонаһымдан ҡотҡар мине. Ваҡыты еткәс, тыныс ҡына донъя ҡуйырға рөхсәтит миңә. Кисер мине. (М. Кәрим).
3) Хисбулла Бибеште алып ҡайтҡан саҡта, Хамматтар ауылда түгел ине. (З. Биишева).
4) Ҡояш төшлөктө уҙып барғанда, Һабрау атын эйәрләп менде лә, изге күңелле остазы Йылҡыбай менән хушлашып, ҡайтыр юлына төштө. (Ә. Хәкимов).

**A26.** Һөйләмдән рәүеште табып, төркөмсәһен билдәләгеҙ.
Сөнәғәт ҡарттарҙың һөйләшкәнен тыңлап байтаҡ торҙо.(Ж. Кейекбаев).
1) Сәбәп-маҡсат рәүеше
2) Ваҡыт рәүеше

3) Оҡшатыу рәүеше
4) Күләм-дәрәжә рәүеше

**A27.** Ҡайһы рәттәге һүҙ һөйләмдә билдәләнгән һүҙҙең синонимы була ала?
Ҡар шултиклем шәп һәм **мул** яуған: бер төн эсендә таш юлдарҙы ҡалын көрт баҫҡан. (Ж. Кейекбаев).
1) иркен
2) күп
3) ҡалын
4) етерлек

**A28.** Һөйләмдә бирелгән һандың төркөмсәһен билдәләгеҙ.
Тағы ла шуныһы шатлыҡлы: Даян Мурзин –Чехословакиялағы егермеләп ҡаланың һәм биш ауылдың Почетлы гражданы. (Н. Асанбаев).
1) Төпһан һәм бүлем һаны
2) Бүлем һаны
3) Рәт һаны
4) Сама һаны һәм төпһан

**A29.** Ҡайһы юлда һүрәтләү саралары булған һүҙбәйләнештәр бар?
1) әсәйемдең бүләктәре
2) ап-аҡ ҡылған төҫлө сәс
3) матур бер көн
4) бигерәк матур күлдәк

**A30.** Ҡайһы рәттәге һүҙ һөйләмдә билдәләнгән һүҙҙең антонимы була ала?
Эйәрҙәге яугирҙың өҙәңгеһенә тотоноп, унын бисәһе генә **бер аҙ** эйәреп бара. (М. Кәрим).
1) әҙ генә
2) әҙерәк
3) бер ни тиклем ваҡыт
4) оҙаҡ

**A31.** Ҡайһы рәттәге һүҙҙәрҙә яңғырау тартынҡылар ғына ҡулланылған?

1) кеше, тауыш, ҡолаҡ
2) беләк, аяҡ, балтыр
3) ағай, ейән, быуын
4) итек, ситек, ойоҡ

---

## 2-СЕ ӨЛӨШ

***В1-В8 эштәрҙе башҡарғанда 1-се һанлыя уаптар бланкыһындағы шаҡмаҡҡа ҡыҫҡаса яуапты һандар һәм хәрефтәр тәртибендә бирергә кәрәк.***

***Тексты уҡығыҙ һәм В1-В5; С1 эштәрен башҡарығыҙ.***

(1) Бер көн Ғәйнулла күршенең ҡолонло бейәһе үлде.
(2) Нурислам өйгә килеп инде лә:
(3) - Ғәйнулла ағайҙарҙың бейәһе ҡазаланған. (4) Ҡолоно… - Нурислам һүҙен әйтеп бөтөрмәне, иламһырап төпкө өйгә инеп китте. (5)Йүгереп күршеләргә барһам, кәртәлә, аяҡтарын һуҙып, ҡанға туҙып, күк бейә ята, ә ҡолонсағы, бахыр, инәһенең күҙҙәренә текләгән дә кеше кеүек илап тора, торғоҙорға теләгәндәй, инәһенең ялынан тешләп тарта, моронон еҫкәй.
(6) Шул көндән Нурислам ҡолондан айырылмаҫ булды.
(7) Бер көн Ғәйнулла күршем әйтә:
(8) - Хәлил ағай, Нурислам ҡолондо бала кеүек тәрбиәләй. (9) Ҡолонда уны бик ярата.
(10) - Етемдәр бит улар. (11) Яҙмыштары оҡшаш. (12) Ғәйнулла ҡустым, ҡолон менән байып китмәҫһең, һин уны Нурисламға бир.
(13) Ҡолонурынына минән теләгән малды һайлап ал.
(14) -Мин дә шулай уйлайым, Хәлил ағай. (15) Нимәгә ул миңә ҡолон? (16) Әйҙә, Нурислам алһын.
(17) - Һай афарин! (18) Рәхмәт, ҡустым, изгелек ерҙә ятып ҡалмаҫ.
(19) - Ә хаҡына килгәндә инде, Хәлил ағай, был турала ҡабат һүҙ ҡуҙғатма. (20) Яныңдағын яҡының менән бүлеш, тигәндәр бит боронғолар. (21) Нурислам һеҙгә генә түгел, беҙгә лә бик яҡын. (22) Бик тәрбиәле бала.
(23) Шул көндән ҡолон беҙҙең ҡураға күсте. (24) Күрһәң икән

Нурисламдың шатлығын!
(25) - Ерәнсәйем, ҡолонсағым, бәләкәсем, тип ярата ине үҙен. (26) Исемен дә «Бәләкәс» тип үҙе ҡушты.
(27) Көндәр үтә торҙо. (28) Егет тә, ҡолон да үҫте… (29) Нурислам – мыҡты егеткә, Бәләкәс һылыу атҡа әйләнде.
(30) Хәлил ҡарт һүҙен дауам итә.
(31) - Нурисламға өй ҙә һалдыҡ. (32) Колхоз да, күршеләр ҙә ярҙамлашты. (33) Тик унда йәшәй алманы Нурислам. (34) Бөйөк Ватан һуғышы башланды. (35) Аты менән һуғышҡа китте. (36) Разведкаға алына. (37) Унан ике-өс айҙанһуң ғына хат килде. (38) Башҡа хәбәр булманы.
(39) Хәлил бабай бер аҙ тынып торҙо ла тағы һөйләй башланы.
(40) - 1943 йылдың ноябрь айҙары ине. (41) Көтмәгәндә Нурислам үҙе ҡайтты. (42) Тик ул элекке Нурислам түгел ине. (43) Шул тиклем ябыҡҡан, хәле бөткән. (44) Өйгә инеү менән бик йүткерә башланы.
(45) Сәй эскәс, үҙе менән Бәләкәс тураһында һөйләне.
(46) Дон буйындағы ҡаты һуғыштарҙа ҡатнашалар. (47) Бәләкәс пуля һыҙғырыуына, туп шартлауына ла өйрәнә, ҡурҡмай икән. (48) Нурисламдың һөйләүе буйынса, унын алған орден миҙалдары бөтәһе лә Бәләкәскә тейеш, имеш. (49) Немец әфисәрендә Бәләкәс ярҙамында әсир иткән. (50) Донды аша сыҡҡанда ла Нурисламды Бәләкәс ҡотҡарған.
(51) Февралдә тағы ла Нурисламды бер нисә иптәше менән разведкаға ебәрәләр. (52) Бойороҡ ҡаты: берәй фрицты йәки берәй документы ҡулға төшөрөргә.
(53) Дошман яғына үтеп, бик мөһим документы ҡулға төшөрәләр, тик ҡайтҡанда ҡамауға эләгәләр. (54) Оҙаҡ алышалар, берәм-берәм сафтан сығалар. (55) Яраланған командиры менән Нурислам ғына тороп ҡала. (56) Командир документты Нурисламға бирә лә беҙҙекеләргә тапшырырға ҡуша. (57) Үҙе дошманға атабашлай. (58) Нурислам шыуышып китә. (59) Ләкин күкрәгенә пуля тейеп, иҫен юғалта.
(60) Күпме шулай ятҡандыр, бер мәл иҫенә килһә, таң атып килә икән. (61) «Иңтәүҙә сумкамды ҡапшап ҡараным, документ урынында икәнен белгәс, йән ингәндәй булды, - ти ул. (62) Әммә тороп булмай. (63) Күҙ алдарым ҡараңғылана. (64) Күпме ваҡыт үткәндер, бер мәл иҫемә килһәм, ат кешнәгәндәй булды. (65) Бәләкәсем бит! (66) Унын тауышын мин мең тауыш араһынан да айырам. (67) Уға һыҙғырҙым

да тағы иҫтән яҙҙым. (68) Күҙҙәремде асһам, янымдаБәләкәсем тора. (69) -Ят, Бәләкәсем, ят! - тип шыбырлайым уға. (70) Хәлемде аңланы малҡай: эргәмә килеп тубыҡланды. (71) Көс-хәл менән арҡаһына ятҡанмын. (72) Ә нисек беҙҙекеләргә еткәнмен – белмәйем», - ти. (73) Документтар бик мөһимбулып сыға, һәм шуның өсөн Нурисламға орден бирәләр. (74) Нурисламды госпиталгә оҙаталар, ә Бәләкәс фронтта ҡала.
(Берйән Байымдан)

**В1.** 8-се һөйләмдәгеэйәрсән киҫәктәрҙе билдәлә:

| № | Һүҙҙәр йәки һүҙбәйләнештәр | Хәреф | Һөйләм киҫәктәре |
|---|---|---|---|
| 1 | Хәлил ағай | А | аныҡлаусы |
| 2 | ҡолондо | Б | хәл |
| 3 | бала кеүек | В | эйә |
| 4 | тәрбиәләй | Г | тултырыусы |

**В2.** 11-се һөйләмдең бөтә һүҙҙәренең өндәрен билдәлә. Яуапты һан менән яҙ.

**В3.** Ҡайһы яуап һөйләмдә ике нөктә ҡуйылырға тейеш урынды дөрөҫ күрһәтә?
Кеше рухының (1) бөйөклөгө шунда (2) ул үҙ ғүмеренең бер өлөшөн (3) яҡын йәки алыҫ киләсәктә (4) күрә белә. (М. Кәрим)

**В4.** 3-8-се һөйләмдәрҙән ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәне табығыҙ һәм уның номерын яҙығыҙ.

**В5.** Бирелгән һүҙҙәрҙең һүҙьяһалыш юлдарын билдәләгеҙ:

| № | Һүҙҙәр | Хәреф | Һүҙьяһалыш юлдары |
|---|---|---|---|
| 1 | Бөйөк Ватан һуғышы | А | ҡабатлау |
| 2 | колхоз | Б | ҡушыу |
| 3 | ҡала | В | парлау |
| 4 | тәрбиәләй | Г | бәйләү |

**В6.** Ъ билдәһе булған һүҙҙәрҙе тап һәм номерын яҙ:
(1) ян…ял, (2) Гөл…ямал, (3) Аҡ…юлов, (4) көн…яҡ

**B7.** Һөйләмдәрҙән ҡылымдарҙытабып, уның заманын билдәләгеҙ:

| № | Һөйләмдәр | Хәреф | Заман формалары |
|---|---|---|---|
| 1 | Бал – тәбиғәттең иң киткес байлығы. | А | билдәле киләсәк заман |
| 2 | Беҙҙе тоҡта йәшереп һаҡлап булмай,<br>Беҙ барыбер тишеп сығасаҡ. | Б | шаһитлы үткән заман |
| 3 | Трамвайҙар йөрөй башлауға ҡарамаҫтан,<br>вокзалға йәйәүләп төштө | В | ҡылым заманды белдермәй |

**B8.** Бирелгән һөйләмдәрҙең ҡайһыһы ниндәй төрөнә тура килеүен билдәләгеҙ:

| № | Һөйләмдәр | Хәреф | Һөйләм төрҙәре |
|---|---|---|---|
| 1 | Бөгөнгө эшеңде иртәгәгә ҡалдырма. | А | ике составлы |
| 2 | Киске ауыл. | Б | билдәле эйәле һөйләм |
| 3 | Кисәлә Нәғимә апай уйын-бейеүҙәр<br>ойоштороп йөрөнө. | В | атама һөйләм |

---

## 3-СЕ ӨЛӨШ

***С1 (инша) эшен башҡарғанда 2-се һанлы яуаптар бланкыһында үтәргә кәрәк***

**С1.** Тексты уҡып сыҡҡандан һуң, текст буйынса инша яҙығыҙ. Автор тарафынан күтәрелгән бер проблемаға аңлатма бирегеҙ (текстан күпләп цитата ҡулланмағыҙ).

Автор ҡарашына аңлатма бирегеҙ. Уның ҡарашы менән килешеүегеҙ, килешмәүегеҙҙе яҙығыҙ. Ни өсөн? Үҙ яуабығыҙҙы тормоштан алған тәжрибә менән дәлилләгеҙ. Инша күләме 150 һүҙҙән кәм булмаһын. Уҡылған текстҡа нигеҙләнмәйенсә яҙылған эш баһаланмай. Әгәр инша тәҡдим ителгән тексты һөйләп биреүгә ҡоролһа, йә текст аңлатма бирелмәй генә күсереп яҙылһа, ундай эш ноль балл менән баһалана. Иншаны таҙа, аңлайышлы почерк менән

яҙығыҙ.